*Гөлнур ҠОЛҺАРИНА,*
*Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең идара ағзаһы*



«Донъяла һинең өсөн иң изге кеше кем?» тигән һорауға күптәр икеләнеп тормай: «Әсәйем», — тип яуап бирер, моғайын. Шуға күрә лә яңы мең йыллыҡтың, яңы быуаттың тәүге йылы Башҡортостаныбыҙҙа Әсә йылы тип иғлан ителеүе оло мәғәнәгә эйә. Әсә йылын беҙ изгелеккә, ихласлыҡҡа, тыныслыҡҡа илтеүсе оло юлдың башы тигән ышаныстар менән ҡаршы алдыҡ, өмөттәребеҙ аҡланһын ине...

Ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә ҡороуҙа, уның матди хәлен нығытыуҙа һәм балаларҙы тәрбиәләүҙә төп нигеҙ ташы булыуын беҙ бик яҡшы аңлайбыҙ. Әммә бөгөнгө көндә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ социаль йәһәттән насар һаҡланған, ә көсәйә барыусы матди һәм рухи хәйерселек, эшһеҙлек, йәшел йылан ағыуының ялмауы, аҙғынлыҡтың, енәйәтселектең артыуы ғаиләнең әхлаҡи һәм рухи хәленә, әсә, ҡатын-ҡыҙҙың һаулығына һәм йәмғиәттәге әүҙемлегенә кире йоғонто яһай. Борон-борондан күп балалы башҡорт ғаиләһе бөгөнгө көндә етди үҙгәрештәргә дусар, өс һәм унан да күберәк балалы ғаиләләр бик һирәк хәҙер. Шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙға хас булмаған етемдәр, ташландыҡ балалар һанының артыуы борсолдора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙенә тәбиғәт биргән әсә булыу, үҙ ырыуын дауам итеү, сәләмәт балалар табыу һәм уларҙы халҡыбыҙҙың иң һәйбәт ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм йолаларына тоғро итеп тәрбиәләү бурысын онотоп ебәрә. Бәлки, ошо кәмселектәрҙе бөтөрөү, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы әүҙемләштереү, ойоштороу кәрәклеге сәбәп булғандыр Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте тигән ойошма барлыҡҡа килеүҙә.

Гүзәл заттарыбыҙҙың киләсәге, йәмғиәттәге хәле проблемаһы һәр саҡ көн үҙәгендә торһа ла, ул төрлө тарихи дәүерҙә, төрлө сәйәси шарттарҙа төрлөсә сағылыш һәм яңғыраш алған. Бөтәбеҙ ҙә яҡшы хәтерләйбеҙ, республикабыҙҙың суверенитеты өсөн көрәш барған 90-сы йылдарҙа байтаҡ милли ойошмалар барлыҡҡа килеп, киҫкен сәйәси акциялар арҡылы ҙур эштәр башҡарылды. Улар араһында милләтебеҙҙең үҫешен, мәҙәниәтен, телен, милли рухын һаҡлап ҡалыу һәм байытыу, йәмғиәттәге хоҡуҡтарын киңәйтеү, әүҙемлеген үҫтереү кеүек оло маҡсаттар ҡуйып, киң аҙымдар менән көрәш юлына баҫыусыларҙың берейе — тап ошо Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте булды ла инде. Тик һынылыш осоро үтеп китеү менән был хәрәкәт бер ни тиклем һүлпәнәйеп, йомшарып ҡалды. Быны иҫбатлаусы дәлилдәр күп. Нисек кенә булмаһын, 2000 йылдың сентябрендә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ойошторған Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең II съезы ойошманың ҡата башлаған тамырҙарына йәшәү һулышы бөрктө. Онотола башлаған эш, яҙғы ташҡын кеүек, яңынан урынынан ҡуҙғалып урғылды.

Бөгөнгө көндә филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова етәкселегендә халҡыбыҙҙың иң әүҙем, арҙаҡлы ҡыҙҙарынан торған идара йәмғәтселек эшмәкәрлеген йәйелдереү өсөн күп көс һала. «Дөйәләй талабың булғансы, энәләй яуабың булһын», ти бит халыҡ, йәмәғәтселек эшенә күңелендә биреп эшләмәһәң, маҡсаттарға ирешеү ауыр икәнен мин беләм. Йәштәрҙең ижтимағи-сәйәси ойошма-

һындағы 7 йыллыҡ тәжрибәм шуны яҡшы күрһәтте: аҙға ғына туҡталып ҡалырға ярамай, ойошма һүлпәнәйә, тарҡала башлай. Былдай көрсөктән бары тик етәксенең аҡыллы идара итеүе һәм идараның берҙәм булыуы ғына ҡурсалап ҡала ала. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең һуңғы ваҡытта уҙғарған сараларын ғына алып ҡарайыҡ.

Башҡортостаныбыҙҙың бер нисә районында халҡыбыҙҙың йолаларына арналған байрамдар уҙғарылды. Өфөләге Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортонда тәрбиәләнеүсе етем балалар менән осрашыуҙар үтте. Тәүге осрашыу изге Рамаҙан айы айҡанлы ойошторолһа, икенсеһе Яңы йыл байрамына бағышланды. Балаларға байрамдар менән ҡотлап бүләктәр, күстәнәстәр таратылды. Атаәсәһенең наҙынан мәхрүм ҡалған балаларҙың көндәлек тормошо менән танышып, төрлө темаларға әңгәмәләр ойошторолдо. Үҙ эшенә яуаплы ҡарағаны, профессиональ эш итеүе һәм йәш быуынды тәрбиәләүгә тос өлөш индергәне өсөн балалар йортоноң етәкселегенә һәм ошо балаларға белем биргән Өфө ҡалаһының 99-сы һанлы мәктәп коллективына Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты исеменән Маҡтау ҡағыҙы тапшырылды.

Киләсәктә арҙаҡлы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың шаҡтай өлөшөн тәшкил итеүсе һылыуҙарыбыҙ, әлбиттә, башҡорт филологияһы факультеттарында уҡый. Ошонан сығып, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты талиптары йәшәгән 1-се дөйөм ятағының уҡыу залында ҡыҙҙар менән түңәрәк өҫтәл уҙғарылды. Ҡыҙҙарға ислам дине тәғлимәттәре, башҡорт халҡының йолалары, журналистика фәненең серҙәре тураһында һөйләргә, һорауҙарына яуап бирергә Ислам институты мөғәллимәһе Фатима ханым, БР Фәндәр академияһы ғалимәһе Розалия Солтангәрәева һәм «Башҡортостан» гәзите хәбәрсеһе Фәүзиә Латипова килде. Ҡыҙҙарҙың йәшәйеше менән яҡындан танышыу өсөн бүлмәләргә инеп, көнкүрештә йолаларҙың, диндең тотҡан урыны хаҡындағы миҫалдар ярҙамында аңлатыу эштәре лә алып барылды. Осрашыуҙан ҡәнәғәт ҡалған ҡыҙҙар менән бәйләнеш киләсәктә лә өҙөлмәйәсәк, сөнки бөгөнгө көндә етәксе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың һирәк ҡалыуы йәш быуын араһында лидерҙарҙы тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүлеүҙе талап итә.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте республикабыҙ эсендә генә түгел, күрше өлкәләрҙә лә эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәрҙе. Мәҫәлән, декабрь айында ул Силәбе өлкәһе Сосновка районының урындағы ойошмаһын төҙөнө. Ойоштороу ҡоронда Башҡортостандан Розалия Солтангәрәева, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты референты Сәүиә Ағзамова һәм мин ҡатнаштым. Сосновка районы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе итеп һайланған Рабиға Фәрит ҡыҙы менән тормош иптәше Арыҫлан Афзал улы Бикбулатовтарҙы районда ғына түгел, ә бөтә Силәбе өлкәһендә йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыусылар булараҡ беләләр. Халҡы, милләте өсөн янып-көйөп эшләүсе был ғаилә күптәргә өлгө булырлыҡ. Үҙҙәренең өс балаһына юғары белем биреп, үҙаллы тормош юлына баҫтырыу менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмай, балалар йортонан тәрбиәгә Денис исемле малайҙы ла алғандар. Трубный урта мәктәбендә яҡташтары Ғәлимов Сәләмдең музейын ойоштороп, тыуған яғының үткәне, күренекле шәхестәре хаҡында тарихи мәғлүмәттәр туплау менән дә шөғөлләнәләр. Үткәнебеҙҙе белмәй тороп, киләсәгебеҙҙе төҙөп булмауын улар яҡшы аңлай.

Дөрөҫ, Башҡортостаныбыҙҙың ҡайһы бер райондарында ойошторолоп ебәрелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың урындағы ойошмаларының эшмәкәрлеге бары тик ҡағыҙҙа ғына ҡала. Үҙ проблемаларыңды үҙең хәл итмәйенсә, ҡуҡтән килгән ярҙамды көтөп ултырһаң, ярыҡ ялғаш янында ҡалыуың ихтимал. Күптәр йәмәғәт эшенең рәхмәтһеҙ эш икәнен күреп, ярты юлдан артҡа сигәләр, бәғзеләре, был көрәш юлында милләттәштәренә терәк булыр урынға, уларҙы кире ҡағалар. Арабыҙҙа бер-беребеҙгә ышаныусанлыҡ, берҙәмлек булмай тороп, беҙ киләсәктә милләтебеҙҙе үҫтерә алмаясаҡбыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙың, әсәнең йәмғиәттәге хәлен яҡшыртыу — милләттең киләсәген булдырыуға бәрәбәр. Бөйөк яҙыусы Достоевский юҡҡа ғына «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр», тимәгән. Ә тормошобоҙҙоң йәме, матурлығы — ҡатын-ҡыҙ.